Башҡортостан Республикаһының муниципаль район Учалы районының Исхаков А.С. исемендәге Уральск ауылы муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы урта дөйөм белем биреү мәктәбе

| | | |
|---|---|---|
| “Ҡаралды” | “Килешелде” | “Раҫлайым” |
| МБ етәксеһе | Директор урынбаҫары | Мәктәп директоры |
| ……..З.Р.Фәзлетдинова | ……..Д.Ә. Сәитхужина | ……Ә.Р. Етимбаева |
| Протокол № 1 | “30” 08 2022 й. | Приказ № 154 |
| “30” 08 2022 й. | | “31” августа 2022 й. |

# 1-се категорияле уҡытыусы Дәүләтшина Мөнирә Сарим ҡыҙының

# 5-11 синыфтары өсөн «Туған теле» һәм “Туған әҙәбиәте» дәрестәренән

# Эш программаһы

Уральск

**Йөкмәткеһе.**

1. Аңлатма яҙыу.
2. “Туған (башҡорт) теле һәм әҙәбиәте” предметына дөйөм характеристика
3. Белем биреү маҡсаты
4. Предмет һөҙөмтәләре.
5. Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе (5-11 синыф).
6. Календарь-тематик планлаштырыу (5-11 синыф).
7. Ҡушымта1 Диктант текстары
8. Ҡушымта 2 Ҡулланылған әҙәбиәт.

## Аңлатма яҙыу

Башҡорт теленең – башҡорт халҡының туған теле һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булып һанала. Туған телдең метапредмет белем биреү функцияһы мәктәптә белем алыу процесында бала шәхесен формалаштырыуҙа «Башҡорт теле» предметының универсаль, дөйөмләштереү характерын билдәләй. Башҡорт теле баланың фекер үҫешенә булышлыҡ итә; белем һәм күнекмәләрҙе үҙ аллы үҙләштереү һәләттәрен үҫтерә, шулай уҡ уҡыусыларҙың үҫтереүсе уҡыу эшмәкәрлеген ойоштора. Туған тел башҡорт мәҙәниәтен өйрәнеүгә нигеҙ булып тора һәм башҡорт әҙәбиәтенең рухи тел байлығын үҫтереүгә булышлыҡ итә; уҡыусыларҙы кешелектең мәҙәни тарихи тәжрибәһенә ылыҡтыра. Киләсәктә төрлө белемде үҙләштереү һәм һаҡлау формаһы буларак, башҡорт теле бөтә предметтар менән тығыҙ бәйләнештә тора һәм профессиональ күнекмәләрҙе үҙләштереү сифатына йоғонто яһай. Аралаша белеү, шул һөҙөмтәлә уңыштарға өлгәшеү, юғары профессиональ һәм социаль әүҙемлек шәхес тормошоноң төрлө өлкәләрендә өлгәшелгән уңыштарын билдәләүсе характеристикаһы булып тора. Туған тел баланың төрлө тормош ситуацияларында тәрбиә-этик нормаларын формалаштырыу нигеҙе; үҙ ҡылыҡтарына дәллиле баһа биреү мөмкинлеген үҫтерә. Туған (башҡорт) теле һәм әҙәбиәтенән эш программаһы 5-11 кластар өсөн төҙөлгән. Был эш программаһында Федераль һәм Республика закондары талаптары тормошка ашырыла:

1) Рәсәй Федерацияһының конституцияһы;

2) Рәсәй Федерацияһының законы (ҡабул ителгән: 29 декабрь 2012 й. № 273-ФЗ «Об образовании в Российской Федерации» (с изменениями и дополнениями);

3) Рәсәй Федерацияһының законы (кабул ителгән:25 октябрь 1991 й. № 1807-1 «О языках народов Российской Федерации» (с изменениями и дополнениями);

4) Төп дөйөм белем биреү Федераль дәүләт белем биреү стандарттары (Рәсәй Федерацияһы мәғариф министрлығы бойороғо менән раҫланған 31 май 2021 й. № 287);

5) Якынса төп дөйөм белем биреүең төп белем биреү программаһы (дөйөм белем биреү буйынса Федераль уҡыу-методик берекмәһенең ҡарары менен хупланған , протокол № 1/22 от 18 марта 2022 г.);

6) Якынса тәрбиәләү программаһы (дөйөм белем биреү буйынса Федераль уҡыу-методик берекмәһенең ҡарары менен хупланған, протокол № 3/22 от 23 июня 2022 г.).

Программаның нигеҙенә, Федераль дәүләт белем биреү стандарты Методологияһы булып торған системалы эшмәкәрле караш һалынды.

“Туған (башҡорт) теле һәм әҙәбиәте” предметына дөйөм характеристика

Рус мәктәптәренең төп бурыс балаларҙы әҙәби текстар нигеҙендә башҡортса һөйләшергә, уҡырға өйрәтеү, тел сараларын әҙәби текста күҙәтеү, табыу, дөрөҫ әйтеү һәм яҙыу, әңгәмә һәм ижади эштәр ваҡытында дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеү йүнәлешендәге эштәр аша башҡарыла.

Был күренеш әҙәбиәт һәм тел материалының тематик бәйләнешен дә, мәғәнәүи бәйләнешен дә тәьмин итә, тәрбиәүи сараларҙы үткәреүгә киң юл аса.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә уҡыусыларҙан бәләкәй күләмле диктанттар,изложениелар, иншалар яҙҙырыу ҙа бик мөһим. Телмәр үҫтереүҙә бындай эштәрҙең файҙаһы бик күп.

Бындай мәктәптәрҙә балаларға башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса теоретик мәғлүмәт биреү түгел, ә уҡыусыларҙың башҡорт телендә һөйләшә, уҡый, аңлай алыу, элементар яҙыу күнекмәләрен формалаштырыу һәм үҫтереү беренсе планда ҡала килә.

Программала тәҡдим ителгән теоретик материал ҡағиҙәләрҙе ятлау юлы менән түгел, ә уҡылған текстарҙан телдең
орфоэпик, орфографик, грамматик нормаларын күҙәтеү, табыу, уларҙы аралашыу процессында ҡулланыу төп урында тора.

Программа кимәле : базис

Программаның йөкмәткеһе 3 йүнәлештә төҙөлгән
- телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу;
- тел менән әҙәби материалдары бергә ҡушып өйрәнелә (интеграция).
- лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу максатынан
сығып өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш).

Урыҫ телле мәктәптәрҙә башҡорт балаларына туған телде уҡытыу максаты күп яҡлы, һәм ул бер нисә аспекттан тора:

1. Уҡыусыларҙы башҡорт әҙәби телендә дөрөҫ һөйләшергә, өйҙә, йәмғиәт урындарында, хеҙмәт
процесында башҡорт әҙәби телен практик файҙаланырға өйрәтеү.
2. Башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик нормалары буйынса белем һәм күнекмәләр биреү.
3. Башҡорт телендә нәшер ителә торған гәзит-журналдарҙы, әҙәби китаптарҙы үҙ аллы уҡып аңлау
күнекмәләрен биреү.
4. Үҙ фекеренде билдәле кимәлдә бәйләнешле итеп һөйләй һәм яҙа алыу күнекмәләрен
формалаштырыу.
5. Телде өйрәнеү барышында балаларҙы башҡорт халҡының фәһемле тарихы, бай мәҙәниәте,

әҙәбиәте, сәнғәте, күренекле шәхестәре, йолалары, тыуған илдең тәбиғәте һ.б. менән таныштырыу, уларҙы башҡорт донъяһына алып инеү, башҡорт халкына, уның теленә, үҙе йәшәгән
төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.
6. Бөтә һаналғандарға таянып, башҡорт телен, әҙәбиәтен өйрәнеү нигеҙендә, балаларҙа туған телгә ихтирам тәрбиәләү, уларға патриотик һәм интернациональ тәрбиә биреү. Күп милләтле Башкортостан Республикаһы, уның халкы, башҡорт халкының республикала төп, ерле халык булыуы, башҡорт халыҡ ижады, билдәле шәхестәр, уларҙың эштәре, ижады менән таныштырыу максатының йөкмәткеһен тәшкил итә.

## Үҫтереү маҡсаты

Фекерләүҙе үҫтереү менән бәйле психик функциялар: логик фекерләү, сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәрен табыу, индуктив, дедуктив фекерләү;
Хәтерҙе үҫтереү (ихтыярлы, ихтыярһыҙ), иғтибарлылыкты үҫтереү;
Аралаша белеү һәләтен үҫтереү (аралашыусанлыҡ, хислелек, эмпатия хистәре);
Ихтыяр көсө, маҡсатлылыҡ , әүҙемлек кеүек һәләттәрҙе үҫтереү.

## Тәрбиәүи маҡсаты

Укыусыларҙың тейешле дәрәжәләге тәрбиәһенән башка укытыу процесын ойоштороу мөмкин түгел. Әлбиттә, укытыусының шәхси сифаттары, укыусы менән махсус ойошторолған мөғәләмәһе укытыу һәм тәрбиә процесында ҙур роль уйнай. Ләкин тәрбиә процесы беренсе сиратта укытыуҙың йөкмәткеһе һәм методтары менән бәйле. Тимәк, укытыуҙың йөкмәткеһен һайлағанда, материалдыңтәрбиәүи мөмкинлектәрен иҫәпкә алыу - программа һәм дәреслек авторҙары өсөн төп талап.
Балаларҙың йәш үҙенсәлектәренә тура килгән, уларҙы ҡыҙыҡһындырған, әхләки проблемаларҙы үҙ эсенә алған йөкмәтке, беренсенән, укытыу процесында тәрбиәүи функция башҡарһа, икенсенән, туранан-тура коммуникатив мотивация тыуҙырыу менән бәйле. Программаға балалар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе сағылдырған, әхләки проблемаға эйә булған бәләкәй күләмле әҙәби әҫәрҙәр һәм автор текстары индерелде.

## Белем биреү маҡсаты

Уҡыусыларҙың башҡорт теле буйынса лексик, грамматик күнекмәләре, филологик белемдәре
сиктәрендә генә ҡалмайынса, телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрендә лә ҡулланырлыҡ кимәлдә
булырға тейеш. Шул ваҡытта ғына башҡорт телен туған тел буларак өйрәнеү бурысы үтәлә.

Һөйләү телмәрен үҫтереү:

1) картина буйынса һөйләү;
2) уҡыған тексты аңлы һөйләү;
3) шиғыр, тиҙәйткестәрҙе яттан һөйләй белеү;
4) йәштәштәре, ололар менән билдәле бер аралашыу сфераларында, ситуацияларҙа
диалогик һәм монологик телмәр ойоштора белеү;
5) үҙенең һәм йәштәштәренең эшмәкәрлеге, тирә-яҡ мөхит хаҡында үҙенең мөнәсәбәтен
белдереп, бәйләнешле һөйләй белеү.

Ишетеп аңлау (аудирование):

1) уҡытыусының дәрес, уйын ситуациялары менән бәйле һорауҙарын, күрһәтмәләрен аңлау;
2) әңгәмәләштәшенең таныш материалға нигеҙләнгән һөйләмен аңлау, уға мөнәсәбәтен
белдереү;
3) тыңлағанда һөйләм, һүҙбәйләнештәрҙе билдәләү, интонацияны айырыу;
4) әҙәби әҫәрҙәрҙең, текстарҙың йөкмәткеһен тыңлап аңлау;
5) аудиотаҫмалағы әкиәт, хикәйәне ишетеп аңлау.

Уҡыу телмәрен үҫтереү:

1) аңлап, дөрөҫ итеп уҡыу;
2) текстағы тыныш билдәләренә ҡарап, тейешле пауза һәм интонацияларҙы үтәү;
3) тексты үҙ аллы аңлы уҡыу;
4) унан кәрәкле мәғлүмәтте табып уҡыу;
5) бәләкәй күләмле шиғырҙарҙы яттан һөйләү.

Яҙыу телмәрен үҫтереү

1) айырым һөйләмдәрҙе, бәләкәй текстарҙы үҙгәрешһеҙ, дөрөҫ итеп күсереп яҙыу;
2) матур яҙыу күнекмәләре;
3) байрам открыткалары яҙыу;
4) һүҙлек диктанты яҙыу.

Программаның педагогик (методик) нигеҙҙәре.

Рус мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу программаһы дөйөм педагогик (методик) талаптарға,
принциптарға нигеҙләнә.

## Уҡыу предметының уҡыу планындағы урыны

Төп дөйөм белем биреү федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы предметтарҙы уҡытыу «Туған әҙәбиәт» предметтары өлкәһенә инә «туған теле һәм туған әҙәбиәтен» өйрәнеү өсөн мотлаҡ булып тора.

– Был предметтарҙы өйрәнеү «Туған (башҡорт) әҙәбиәтенән»:

- 5 класс – 34 сәғәт (аҙнаһына 1 сәғәт, 34 уҡыу аҙнаһы);
- 6-сы класс – 34 сәғәт (аҙнаһына 1 сәғәт, 34 уҡыу аҙнаһы);
- 7 класс – 17 сәғәт (2 аҙнаға 1 сәғәт, 17 уҡыу аҙнаһы);
- 8-се класс – 17 сәғәт (2 аҙнаға 1 сәғәт, 17 уҡыу аҙнаһы);
- 9 класс – 34 сәғәт (аҙнаһына 1 сәғәт, 34 уҡыу аҙнаһы).
- 10 класс— 34 сәғәт (аҙнаһына 1 сәғәт, 34 уҡыу аҙнаһы);

«Туған (башҡорт) теленән»:

- 5 класс – 68 сәғәт (аҙнаһына 2 сәғәт, 68 уҡыу аҙнаһы);
- 6-сы класс – 68сәғәт (аҙнаһына 2 сәғәт, 68 уҡыу аҙнаһы);
- 7 класс – 51 сәғәт (2 аҙнаға 3 сәғәт, 51уҡыу аҙнаһы);
- 8-се класс – 51 сәғәт (2 аҙнаға 3 сәғәт, 51уҡыу аҙнаһы);
- 9 класс – 68 сәғәт (аҙнаһына 2 сәғәт, 68 уҡыу аҙнаһы);
- 11 класс— 34 сәғәт (аҙнаһына 1 сәғәт, 34 уҡыу аҙнаһы);

**Предмет һөҙөмтәләре.**

1) телдең төп функциялары тураһында, башҡорт теленең башҡорт халының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булыуы тураһында, тел менән халыҡ мәҙәниәттең бәйләнештәре тураһында, кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;

2) гуманитар фәндәр системаһында туған телдең урынын һәм мәғарифта тулыһынса уның ролен
аңлау;

3) туған тел тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү; уның кимәл һәм берәмектәр бәйләнешен
аңлау;

4) тел ғилеменең төп аңлатмалары: лингвистика һәм уның төп бүлектәре; тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уларҙың төрҙәре; аралашыу ситуациялары,фәнни, публицистик, рәсми-эшлекле стилдәр, матур әҙәбиәт теле; фукциональ- мәғәнәүи телмәр төрҙәре (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү); текст, текст төрҙәре; телдең төп берәмектәре, уларҙың билдәләре һәм телмәрҙә ҡулланыу үҙенсәлектәрен үҙләштереү;

5) башҡорт теленең лексиксикаһы һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын, башкорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;

6) телдең төп берәмектәрен, грамматик категорияларын анализлау һәм таныу, тел берәмектәрен аралашыу шарттарына ярашлы ҡулланыу;

7) һүҙгә төрлө анализ төҙәрен (фонетик, морфематик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик), төп билдә һәм структура күҙлегенән сығып, күп аспектлы анализ яһау;

8) тел-һүрәтләү саралары һәм уларҙы үҙ телмәреңдә ҡулланыу;

9) туған телдең эстетик фукцияһын таныу, матур әҙәбиәт текстарын анализлағанда телмәрҙең эстетик кимәлен баһалау.

## Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар

5-се синыф

- Уҡытыусы уҡыған йәки һөйләгән, үҙең уҡыған тексты аңлай алыу;
- Уҡыған әҫәр, картина, экскурсия, ҡараған фильм буйынса әңгәмәлә ҡатнашыу;
- Предметты, күренеште элементар рәүештә һүрәтләү, уға үҙ мөнәсәбәтеңде белдереү;
- Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙе, поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән һөйләү;
- 8 – 10 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү;
- Тексты шыма, аңлы, дөрөҫ, тотош һүҙләп уҡыу, логик баҫымдарҙы, паузаларҙы дөрөҫ әйтеү; тасуири уҡыу;
- текстың өлөштәренә, иллюстрацияларына исем биреү, өҙөк буйынса план төҙөү; текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе, һүрәтләү, тасуирлау сараларын табыу, мәғәнәләрен аңлатыу, һүҙлектәр менән эш итеү;
- Хикәйә, әкиәт, мәҡәл, йомаҡ жанрҙарын практик айыра белеү;
- Ҙур булмаған һөйләмдәрҙе күсереп һәм яттан яҙыу; текст, күҙәтеүҙәр йәки экскурсия буйынса һорауҙарға яуап яҙыу;
- бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү;
- Өйрәтеү характерындағы изложение, иншалар яҙыу; яҙғанды элементар формала камиллаштыра алыу.

**6 - сы синыф**

Һүрәтләү, хикәйәләү тибындағы текстарҙы тыңлау һәм аңлап ҡабул итеү;
* текстың планын төҙөү;
* текстың йөкмәткеһен план буйынса һөйләү.

2. Бирелгән тема буйынса диалог төҙөү; диалогты дауам итеү;
* текстағы образлы һүрттәрҙе, һүрәтләү – тасуирлау сараларын, мәҡәлдәрҙе табыу, уларҙы телмәрҙә дөрөҫ итеп ҡулланыу;
* тексты икенсе телгә тәржемә итеп һөйләү;
* 5-6 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү.

3. Тексты дөрөҫ, аңлы, тасуири уҡыу;
  * тексты мәғәнәле өлөштәргә бүлеү, уларға исем биреү, план төҙөү;
  * әҫәрҙән кәрәкле өлөштәрҙе һайлап ала белеү;
  * текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, һүҙлектәр менән эш итә белеү.

4.Ижади диктанттар, өйрәтәү изложениелары һәм иншалары яҙыу;
  * иптәшеңдең яҙғанын һәм үҙ яҙмаларыңды тикшереү, каммилаштыра белеү күнекмәләре.

## 7 - се синыф

1. Һүрәтләү, хикәйәләү тибындағы текстарҙы тыңлау һәм аңлап ҡабул итеү;
- текстың планын төҙөү;
- текстың йөкмәткеһен план буйынса һөйләү.

2. Бирелгән тема буйынса диалог төҙөү; диалогты дауам итеү;
- текстағы образлы һүҙҙәрҙе, һүрәтләү – тасуирлау сараларын, мәҡәлдәрҙе табыу, уларҙы телмәрҙә дөрөҫ итеп ҡулланыу;
- тексты икенсе телгә тәржемә итеп һөйләү;
- 6-7 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү.

3. Тексты дөрөҫ, аңлы, тасуири уҡыу;
- тексты мәғәнәле өлөштәргә бүлеү, уларға исем биреү, план төҙөү;
- әҫәрҙән кәрәкле өлөштәрҙе һайлап ала белеү;
- текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, һүҙлектәр менән эш итә белеү.

4. Ижади диктанттар, өйрәтеү изложениелары һәм иншалары яҙыу;

5. Иптәшенең яҙғанын һәм үҙ яҙмаларын тикшереү, камиллаштыра белеү күнекмәләре.

## 8 - се синыф

- Уҡығанды, һөйләгәнде аңлау, йөкмәтке буйынса һорауҙар, һәм шул һорауҙарға яуап бирә белеү;
- Прозаик текстарҙы дөрөҫ, шыма, аңлы уҡыу белеү;
- Уҡылған тексты өлөштәргә бүлеү,исем биреү, элементар план төҙеү;
- Текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, һүҙлектәрҙе файҙаланыу;
- Башҡортостан тураһында мәғлүмәттәргә эйә булыу;
- Башҡорт халҡының мәҡәлдәре, йомаҡтарын белеү;
- Хәрефтәрҙе һәм һүҙҙәрҙе матур , дөрөҫ яҙа белеү;
- Өйрәтеү диктанттар яҙа белеү.
- үҫтереү, яттан һөйләү ҡарала.
- мәғлүмәттәргә эйә булыу;
- Башҡорт халҡының мәҡәлдәре, йомаҡтарын белеү;
- Хәрефтәрҙе һәм һүҙҙәрҙе матур , дөрөҫ яҙа белеү;
- Өйрәтеү диктанттар яҙа белеү.

## 9- сы синыф

Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар.

1. Ҙур булмаған эпик әҫәрҙәрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен һөйләп биреү. Художество әҫәрҙәрҙе инсценировкалау.

2. Уҡытыусы ҡуйған проблемалы һорау ярҙамында героаға характеристика биреү;
- тәҡтим ителгән әҫәрҙе тәржемә итә белеү, таныш булмаған һүҙҙәрҙе айыра белеү;
- 10-12 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү;
- эпик, логик, лироэпик һәм драматик әҫәрҙәрҙе айыра белеү.

3. Һорауҙарға тулы яуап һәм геройҙарға баһалама биреү;
- уҡылған әҫәрҙәргә үҙ мөнәсәбәтеңде белдерә белеү.

4. Телмәр ағышында өндәрҙең үҙгәреүен айыра һәм аңлата белеү;

- диалогтарҙа башҡа кешеләрҙең телмәрендәге орфоэпик хаталарҙы күҙәтә һәм төркөмләй белеү;
- һүҙлектәр менән файҙалана белеү;
- диктант, изложение һәм иншалар яҙыу;
- өндәш һүҙҙәр, улар эргәһендә тыныш билдәләренең ҡуйылышы;
- һүҙҙәрҙе яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙың килеү тәртибе (рус теле менән сағыштырыу).
- үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәрҙең телмәрҙәге роле.

## Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе.
## 5 – се синыф

башҡортса телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу һәм камиллаштырыу;
башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик үҙенсәлектәрен аңлау һәм үҙләштереү;
бәйләнешле текст менән эш итә белергә өйрәтеү.
Программала ҡуйылған маҡсат һәм бурыстар:
Уҡыусыларҙы башҡорт әҙәби telendә дөрөҫ һөйләшергә, өйҙә, йәмәғәт урындарында, хеҙмәт процесында башҡорт әҙәби телен практик файҙаланырға өйрәтеү.
Башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик нормалары буйынса белем һәм күнекмәләр биреү.
Башҡорт телендә нәшер ителә торған гәзит-журналдарҙы, әҙәби китаптарҙы үҙ аллы уҡып аңлау күнекмәләрен биреү.
Үҙ фекереңде билдәле кимәлдә бәйләнешле итеп һөйләй һәм яҙа алыу күнекмәләрен формалаштырыу.
Телде өйрәнеү барышында балаларҙы башҡорт халҡының фәһемле тарихы, бай мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте, башҡорт йолалары, күренекле шәхестәре, тыуған илдең тәбиғәте менән таныштырыу, уларҙы башҡорт донъяһына алып инеү, башҡорт халҡына, уның теленә, үҙе йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.
Бөтә һаналғандарға таянып, рус һәм башҡорт телдәрен, әҙәбиәтен өйрәнеү нигеҙендә, балаларҙа туған телгә ихтирам тәрбиәләү, уларға илһөйәр һәм интернациональ тәрбиә биреү.
Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе
Тел буйынса башланғыс синыфтарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Фонетика һәм орфоэпия. Өн һәм хәреф. Башҡорт теленең өндәр системаһы. Уларҙы белдергән хәрефтәр. Башҡорт теленең өндәр системаһын рус теленең өндәр системаһы менән сағыштырыу. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре, уларҙы белдергән хәрефтәр.
Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Һуҙынҡы өндәр, уларҙың һаны һәм әйтелеше. Башҡорт телендәге һуҙынҡы өндәрҙең әйтелешен рус телендәге һуҙынҡы өндәрҙең әйтелеше менән сағыштырыу. Фонетик күнегеүҙәр.
Тартынҡы өндәр, уларҙың һаны һәм әйтелеше. Башҡорт телендәге тартынҡыларҙың әйтелешен рус телендәге тартынҡыларҙың әйтелеше менән сағыштырыу. Фонетик күнегеүҙәр.
Башҡорт телендәге к-г, һ-х, н-ң, с-ҫ, з-ҙ тартынҡыларының дөрөҫ әйтелешенә күнекмәләр үткәреү, фонетик күнегеүҙәр эшләү.
Телмәр ағышында өндәрҙең бер-береһенә йоғонтоһо. Тартынҡы өндәрҙең үҙгәреше. Башҡорт теленең ҡанундарына ярашлы һөйләү күнекмәләре үткәреү.
Башҡорт телендә сингармонизм. Башҡорт телендә сингармонизм, уҡыусыларҙы уларҙың төрҙәре менән таныштырыу. Фонетик күнегеүҙәр.
Башҡорт телендә ижектәр. Ижектәрҙең төрҙәре. Башҡорт һәм рус телдәрендәге ижектәрҙе сағыштырыу. Һүҙҙәрҙе юлдан-юлға күсереү ҡағиҙәләре менән танышыу.
Башҡорт телендә баҫым, уның үҙенсәлектәре. Баҫымдың һуңғы ижеккә төшөүе һәм ялғау ҡушҡан һайын күсә барыуы. Башҡорт һүҙҙәрендәге һәм рус теленән һуңғы осорҙа үҙләштерелгән һүҙҙәрҙәге баҫымды сағыштырыу.
Башҡорт телендә һүҙҙәрҙең тамыры, ялғауҙар тураһында төшөнсә биреү. Тамырға ялғау ҡушҡанда һүҙҙәрҙең мәғәнәһе үҙгәреүен күҙәтеү, күнегеүҙәр эшләү.
Башҡорт һәм рус телендә интонация һәм уның төрҙәре, төп өлөштәре: логик баҫым, пауза, фраза баҫымы, телмәр мелодикаһы, тойғо баҫымы.
Башҡорт һәм рус телдәрендә интонацияның үҙенсәлектәрен асыҡлау. Башҡорт телендәге ябай һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡырға өйрәтеү күнекмәләре биреү.

Башҡорт теленең һүҙлек байлығы, уның сығанаҡтары. Төп башҡорт һүҙҙәре һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр. Бер мәғәнәле һәм күп мәғәнәле һүҙҙәр. Һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәлә ҡулланылыуы.
Башҡорт телендә нығынған һүҙбәйләнештәр, улар аңлатҡан мәғәнәне асыҡлау. Нығынған һүҙбәйләнештәрҙе һүҙҙәр менән сағыштырыу, алмаштырыу күнегеүҙәре. Нығынған һүҙбәйләнештәрҙең телмәрҙәге ролен билдәләү. Башҡорт һәм рус телендәге һүҙбәйләнештәрҙе сағыштырыу, тәржемә итеү, улар менән һөйләмдәр төҙөү.
Башҡорт телендә һүҙьяһалыш. Һүҙ составы. Башҡорт теленең агглютинатив тел булыуына күнегеүҙәр. Тамыр. Нигеҙ. Ялғауҙар. Ялғауҙарҙың төрҙәре: һүҙ һәм төр яһаусы ялғауҙар, үҙгәртеүсе ялғауҙар. Ялғауҙарҙың варианттары менән практик таныштырыу, ул варианттарҙың барлыҡҡа килеү сәбәптәрен аңлатыу, практик күнегеүҙәр башҡарыу.
Рус теленән үҙләштерелгән бер төркөм һүҙҙәрҙә ялғау ҡушҡанда һүҙ аҙағындағы тартынҡы өндөң төшөп ҡалыуын, йәки һүҙынҡылар өҫтәлеүен практик үҙләштереү. Ялғауҙар ҡушҡанда ҡайһы бер һүҙҙәрҙә өндәрҙең сиратлашыуы. Практик танышыу. Башҡорт һәм рус телдәрендәге һүҙьяһалыш юлдарын асыҡлау, уларҙың оҡшашлығы һәм айырмаһын билдәләү: тамыр һүҙ, яһалма һүҙ, ҡушма һүҙ.
Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын үҙләштереү, иҫтә ҡалдырыу, нығытыу буйынса практик эштәр башҡарыу.
Башҡорт теле буйынса йыл буйына үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Бәйләнешле телмәр үҫтереү. Орфоэпик ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ ҡулланыуға, тексты интонация менән уҡыуға күнегеүҙәр.
Эш ҡағыҙҙары төрҙәренән белешмә биреү. Хат яҙырға өйрәтеү.
**Әҙәбиәт.**
С. Муллабаев. Шатлыҡлы иртә.
Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Уҡыусыларҙың йәйге тәьҫораттары менән уртаҡлашыу, уҡыу, белем, яңы уҡыу йылы тураһында әңгәмә ойоштороу.
Б. Бикбай. Туған тел. Р. Ғарипов. Туған тел.
Шиғырҙарҙа туған телде данлау, хөрмәтләү мотивтарының сағылышы. Тасуири уҡыу күнекмәләре. Туған телдең ҡәҙере, уны белеүҙең мөһимлеге тураһында әңгәмә.
Әминбәк (башҡорт халыҡ әкиәте).
Әкиәттең йөкмәткеһен үҙләштереү, әкиәт стилендә һөйләү күнекмәләре үткәреү. Һүҙлек өҫтөндә эш.
К. Кинйәбулатова. Көҙ еткәс. Ф. Рәхимғолова. Көҙгө Урал. Р. Ғарипов. Торналар. Н. Иҙелбай. Дүрт миҙгел.
Б. Ноғоманов. Йәйбикә менән Көҙбикә.
Әҫәрҙәрҙә көҙгө тәбиғәттең тасуирланыуын ҡарау, уны үҙең күргәндәр менән сағыштырыу. Шиғырҙарҙы тасуири
уҡыу, һүрәттәр төшөрөү. Яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Сағыштырыу тураһында төшөнсә биреү.
М. Кәрим. Сыйырсыҡ балаһы. А. Йәғәфәрова. Яҡшылыҡ.
Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Үҙ һүҙҙәрең менән һөйләү күнекмәләре үткәреү. Хикәйә менән әкиәтте сағыштырыу.
Н. Әминева. Тыуган ер. Д. Бураҡаев. Урал тауҙары. Тыуған ер (ҡобайыр). Т. Ғәниева. Уралиә тигән ил (әкиәт).
Р. Ниғмәти. Йәмле Ағиҙел буйҙары (поэманан өҙөк). Ф. Рәхимғолова. Мин – Башҡортостандан. Ә. Вахитов. Аҡһаҡал аманаты.
«Минең тыуған төйәгем» темаһына әңгәмә. Тасуири уҡыу күнекмәләре. Тыуған ер, тыуған төйәк, Башҡортостан, Урал тураһындағы башҡа әҫәрҙәрҙе иҫкә төшөрөү.
А. Йәғәфәрова. Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар (әкиәт). Ф. Мөхәмәтйәнов. Ҡыҙыҡ һүҙ. Ф. Иҫәнғолов. Хәмит күпере. Йылмайыу. Р. Ғарипов. Алма.

Шиғырҙар өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Әкиәттәрҙең һәм хикәйәнең йөкмәткеһен үҙләштереү, уларҙа дуҫлыҡ, хеҙмәт темаһының сағылышын ҡарау. Образдарға характеристика биреү. Яңы һүҙҙәр үҙләштереү.
С. Әлибаев. Ҡыш. Н. Мусин. Ҡоралайҙар. В. Әхмәҙиев. Ҡышҡы урманда. Ҡ. Даян. Шыршы. М. Кәрим. Ҡыш бабай бәләкәй саҡта.
Шиғырҙарҙа ҡышҡы тәбиғәттең матурлығының, шыршы байрамының тасуирланыуы. Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләргә өйрәнеү. Образдарға характеристика биреү. Яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Шиғри телмәр һәм проза телмәре. Хикәйәләү тураһында төшөнсә.
Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. «Аҡъял батыр», «Ҡамыр батыр» әкиәттәре. Мәҡәлдәр. Йомаҡтар. Таҡмаҡтар. Йырҙар.
Башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижады тураһында дөйөм белешмә биреү, уның традицион жанрҙарын барлау, һәр жанрға хас үҙенсәлектәрҙе асыҡлау. Әкиәттәрҙең тематик төркөмдәрен ҡарау. Әкиәттәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, әкиәт стилендә һөйләү күнекмәләре үткәреү. Әкиәт геройҙарына характеристика биреү. Мәҡәлдәрҙең, йомаҡтарҙың, таҡмаҡтарҙың, йырҙарҙың жанр үҙенсәлектәренә төшөнөү.
Р. Солтангәрәев. Эшләп ашаһаң. З. Биишева. Йәшәү – хеҙмәт. Ф. туғыҙбаева. Яңы күлдәк. «Ҡәмән менән Сәмән, картуф сәскән Сәлмән» әкиәте.
Әҫәрҙәрҙә хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләү, һөнәр һайлау. «Минең буласаҡ һөнәрем» темаһына әңгәмә. Төрлө һөнәрҙәр тураһында мәҡәлдәр йыйыу, йырҙар тыңлау.
Д. Бүләков. Яралы китап. Ғ. Рамазанов. Ағайым хаты. Ә. Вахитов. Өс бөртөк бойҙай. М. кәрим. Дан кәпәс түгел.
Н. Мусин. Атайымдың ос һәнәге.
Хикәйәләрҙә һуғыш темаһының бирелеше. Фронтта һәм тылда ил азатлығы өсөн көрәш. Образдарға характеристика. Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен тасуири һөйләргә өйрәнеү. Һүҙлек өҫтөндә эш. Тәржемә күнекмәләре үткәреү. Хикәйә тураһында төшөнсә.
Ә. Әминев. Әсикмәк. Ф. Мөхәмәтйәнов. Әсәйем ҡулы. Әсә йөрәге (ҡобайыр). Ғ. Аллаяров. Таҫтамал.
К. Кинйәбулатова. Әсә күңеле.
Әҫәрҙәрҙә әсә образының бирелешен асыҡлау. Шиғырҙарҙы тасуири итеп уҡыу күнекмәләре үткәреү. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләргә өйрәнеү.
Р. Назаров. Яҙ килә. З. Хисмәтуллин. Сыйырсыҡ. С. Әлибаев. Яҙҙы кем килтергән? М. Кәрим. Һеңлемдең төшө.
Ҡ. Даян. Торналар. Р. Ғарипов. Һабантурғай йыры.
Әҫәрҙәр өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Шиғырҙарҙа миҙгелдәр алмашыныуы, тәбиғәттең уяныуы, яҙ килеүе, ҡоштарҙың, хайуандарҙың тормошондағы үҙгәрештәрҙе күҙәтеү. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләү, тәржемә күнекмәләре үткәреү. Яҙ тураһында әңгәмә үткәреү, ижади эштәр башҡарыу. Йәнләндереү тураһында төшөнсә.
«Айыу менән бал ҡорттары» башҡорт халыҡ әкиәте. Б. Ноғоманов. Ҡарһылыу менән Яҙһылыу. Ғ. Хисамов. Аҡъяурын сал бөркөт.
Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләү, һүҙлек, тәржемә эшен башҡарыу. Әкиәт геройҙарының эштәрен барлау. Ауыҙ-тел ижады һәм әҙәбиәт.
М. Кәрим. «Өс таған» повесынан өҙөктәр.
Өҙөктәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, ҡысҡырып, дөрөҫ интонация менән уҡыу күнекмәләре үткәреү. Әҫәрҙә ысын дуҫлыҡтың сағылышын ҡарау, дуҫлыҡ тураһында әңгәмә ойоштороу. Ғабдулла, Вәзир, Айҙар образдарына характеристика биреү.
А. Игебаев. Еңеү көнө. К. Мәргән. Ҡурайсының үлеме. Р. Ниғмәти. Еңеүселәргә дан. В. Исхаҡов. Миҙал һәм малай.
Еңеү көнөнә арналған шиғырҙарҙы тасуири уҡыу. Шағирҙарҙың был иҫтәлекле тарихи ваҡиғаға, еңеүселәргә мөнәсәбәтен, ватансылыҡ тойғоларының сағылышын күҙәтеү, Еңеү көнө, Бөйөк ватан һуғышы, халҡыбыҙҙың ил азатлығы өсөн һуғышта күрһәткән

батырлығы тураһында әңгәмәләр ойоштороу, ижади эштәр башҡарыу. Яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү, тәржемә эштәре башҡарыу. Еңеү тураһында йырҙар өйрәнеү.
Р. Назаров. Тракторсы йыры. З. Хисмәтуллин. Урман ҡунағы. С. Агиш. Турыҡай. М. Ғафури. Һарыҡты кем ашаған?
Шиғырҙы тасуири итеп уҡыу күнекмәләре үткәреү. Үҙ һөнәреңә, хеҙмәткә һөйөү, ил, халыҡ, киләсәк алдында бурыс төшөнсәләре тураһында фекер алышыу. Сәсмә әҫәрҙәрҙе тасуири итеп уҡыу үҙенсәлектәренә төшөнөү. Мәҫәлдәрҙең мәғәнәһенә төшөнөү, йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәреү менән һөйләп өйрәнеү. Әҫәрҙе ролдәргә бүлеп уҡыу, образдарға характеристика биреү.
Аллегория һәм мәҫәл тураһында төшөнсә.
С. Муллабаев. Йомарт йәй. Б. Рафиҡов. Йондоҙ һанаусы малай. М. Кәрим. Ап-аҡ мөғжизә.
Шиғырҙа йәйге тәбиғәттең тасуирланыуы. Үҫемлектәрҙең, бөжәктәрҙең тормошон күҙәтеү. Йәй, йәйге каникул, йәйге эштәр тураһында әңгәмәләшеү, ижади эштәр башҡарыу. Тасуири уҡыу күнекмәләре. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, образдарға характеристика биреү, яҙма эштәр эшләү. Йәйге тәбиғәткә экскурсия ойоштороу.

## 6-сы синыф

### Туған тел.

Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

Беҙҙе мәктәп ҡаршылай
1 сентябрь- Белем көнө. Уҡыусыларҙың хеҙмәт көндәре башланыуы. Белем, тел тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү. Грамматика буйынса 1-5-се кластарҙа үткәндәрҙе ҡабатлау.
Башҡортостан ере буйлап
Башҡортостан Республикаһы, уның тарихы, күренекле шәхестәре, байлыҡтары менән танышыу. Тема буйынса һөйләү телмәрен үҫтереү, ижади эштәр башҡарыу. Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһе. Сифат. Сифат дәрәжәләре. Синоним. Антоним. Омоним.
Юл йөрөү ҡағиҙәләре һәм билдәләре
Хәүефһеҙлек, юл йөрөү ҡағиҙәләре,транспорт төрҙәре тураһында һөйләргә,өйрәтеү,уҡыу материалын тасуири,аңлы уҡыу. Рәүеш.
Рәүеш дәрәжәләре.
Почта.Телефон.Телеграф
Почтала үҙеңде тота,телефондан дөрөҫ һөйләшә белеү,хат яҙыу ҡағиҙәләренә өйрәтеү.Ҡылым.Ҡылым һөйкәлештәре.Хәбәр һөй-кәлеше.Хәҙерге заман.
Ҡыш дауам итә
Ҡыш миҙгеленең үҙенсәлектәре.Текстар уҡыу ,шиғырҙар,һынамыштар ятлау,һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү,һүҙ байлығын арттырыу.Ҡылымдың хәбәр һөйкәлеше.Үткән заман. Киләсәк заман.
Дуҫ ҡәҙерен бел
Ысын дуҫлыҡтың ҙур мәғәнәгә эйә булыуы,уны һаҡлай белеү.Дуҫлыҡ хаҡында әҫәрҙәр уҡыу,мәҡәлдәр табыу. Ҡылымдың шарт һөйкәлеше.
Башҡортостан йылғалары,күлдәре.Экология мәсьәләһе- 7 сәғәт.
Башҡортостандың тәбиғәте,уның байлыҡтары тураһындағы мәғлүмәт менән таныштырыу.Республикалағы йылға, күлдәр тураһында текстар уҡыу.Уларҙың атамаларының мәғәнәһе,килеп сығышы тураһында һөйләшеү.Экология мәсьәләһе.Ҡылымдың теләк һөйкәлеше.
Бына тағы яҙ килде
Яҙ миҙгеленең үҙенсәлектәре. Яҙғы тәбиғәтте күҙәтеү.Осоп килеүсе ҡоштар тураһында һөйләшеү.1 май,9май байрамдары.Грамматика буйынса 6-сы класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

7-се синыф

Әҙәбиәт.
Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе
Халыҡ ижады тураһында. Әкиәттәр
Әкиәттәр тураһында түбән кластарҙа үткәнде иҫкә төшөрөү. Тематик яҡтан әкиәттәрҙең төркөмдәре: тормош-көнкүреш, тылсымлы, батырҙар һәм хайуандар тураһындағы әкиәттәр.
Хайуандар тураһындағы әкиәттәр. «Етем төлкө», «Айыу менән бал ҡорттары». Тылсымлы әкиәттәр. «Алтын алма», «Әбйәлил». Тормош-көнкүреш әкиәттәре «Алтын тамсы», «һаранбай менән Зиннәт ағай».
Әкиәттәрҙе мәғәнәүи өлөштәргә бүлеү. Исемдәр биреп план төҙөргә өйрәтеү.
Әҙәбиәт теорияһы. Эпитет, гипербола, аллегория төшөнсәләрен ҡабатлау.
Риүәйәт һәм легендалар
Риүәйәт һәм легендаларға төшөнсә биреү. Уларҙың тематик бүленеше, оҡшаш һәм айырма яҡтары. Ер-һыу, ырыу-ҡәбилә тарихы: «Етегән йондоҙ», «Ай менән Зөһрә». Ырым-ышаныу: «Сыңрау торна». Тарихи риүәйәттәр: «Бошман ҡыпсаҡ батыр». Тормош-көнкүреш риүәйәте: «Ғилмияза»
Ҡылымдарҙың затлы һәм затһыҙ, барлыҡ-юҡлыҡ формалары. Ҡылымдарҙың күләм һәм йүнәлеш категориялары менән практик таныштырыу күнегеүҙәре. Төп йүнәлештән башҡа ҡылым йүнәлештәренең айырым ялғауҙары булыуын күрһәтеү һәм башҡорт телендә биш йүнәлеш: төп йүнәлеш, ҡайтым йүнәлеше, төшөм йүнәлеше, йөкмәтеү йүнәлеше һәм уртаҡлыҡ йүнәлеше барлығын практик миҫалдарҙа күрһәтеү.
Ҡылымдарҙың затлы формаларының үҙенсәлектәрен: һан, зат, заман менән үҙгәрешен асыҡлау, уларҙы рус теленә тәржемә итеү күнегеүҙәрен эшләтеү.
Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың мәғәнәләре, заман формалары, һан, зат менән үҙгәреше, ниндәй һөйләм киҫәге була алыуы.
Хәҙерге заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың мәғәнәһе, яһалышы, үҙгәреше.

Йырҙар
Йыр тураһында төшөнсә. Боронғо һәм хәҙерге йырҙар. Оҙон һәм ҡыҫҡа йырҙар. Йырҙарҙа көй һәм моңдоң әһәмиәте. Тематикаһы һәм йөкмәткеһе яғынан йырҙарҙың төркөмдәргә бүленеше. Халыҡтың рухи тормошонда йырҙың роле. Тарихи һәм лирик йырҙар. Тарихи йырҙар («Эскадрон», «Урал»). Тыуған ил һәм халыҡ берҙәмлеге тураһында («Йәйләүек»). Ҡасҡындар тураһында («Буранбай», «Бейеш»). Кантон башлыҡтары тураһында («Тәфтиләү», «Ҡолой кантон»). Ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышы тураһында («Зөлхизә», «Ғилмияза»).
Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының үткән заманы.
Таҡмаҡтар
Таҡмактар тураһында төшөнсә. Бейеү таҡмаҡтары. Уйын таҡмаҡтары. Таҡмаҡтарҙың башҡарылыу үҙенсәлектәре, уларҙың йырҙарҙан айырмаһы.
Алтын көҙ
М.Тажи «Алтын көҙ», Ф.Рәхимғолова «Көҙ» шиғырҙарында көҙгө тәбиғәттең, көҙ билдәләренең һүрәтләнеше.
Әҙәбиәт теорияһы: Поэтик телдәге һүрәтләү сараларын ҡабатлау. Метафора тураһында төшөнсә.
М.Ғафури. «Ҡыр ҡаҙы» хикәйәһенең идея-тематик йөкмәткеһе. Малайҙың һәм унең атаһының ҡыр ҡаҙына ҡарата мөнәсәбәте. Хикәйәлә ҡоштарға, хайуандарға һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү һәм ярҙам итеү мотивы. Кеше һәм тәбиғәт темаһына әңгәмә үткәреү.
Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының эш ҡушыуҙы, бойороуҙы белдереүе, яһалышы, һан, зат менән үҙгәреше, барлыҡта йәки юҡлыҡта килеүе.
Уҡыу - белем шишмәһе
Раил Байбулатов. «Нурлы күҙҙәр». Н.Мусин. «Тайғаҡ баҫма». Әҫәрҙәрҙә дуҫлыҡ, тырышлыҡ, тоғролоҡ, намыҫлылыҡ һәм әхлаҡ проблемаларының сағылышы. Хәмзә

һәм уҡытыусы, һуғыш ветераны Уғатар ағай образдары. Рәхмәт менән Әсҡәт дуҫлығы. Рәхмәткә хас сифаттар. Хәмзәнең ҡылығын баһалау.
Теләк һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың яһалышы, мәғәнәһе, үҙгәреше.
Дуҫлыҡта – берҙәмлек
Б.Бикбай. «Рус теле», Р.Сафин. «Дуҫлыҡ», Ш.Бикҡол. «Дуҫлыҡ», М. Кәрим. «Миләш». Был шиғырҙарҙа дуҫлыҡты данлау. Ысын дуҫлыҡты баһалау. Рус һәм башҡорт халҡы араһындағы дуҫлыҡҡа һоҡланыу, ғорурланыу тәрбиәләү.
Р.Байбулатов. «Һарыбай». Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү. Унда дуҫлыҡтың сағылышы. Төп геройҙарҙың характерҙарына хас сифаттар.
Ә.Бикчәнтәев. «Бакенщиктар илаҡ булмай». Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Унда батырлыҡтың сағылышы. Ата һәм ул образдары. Шарт һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың яһалышы, мәғәнәһе, үҙгәреше.
Хеҙмәте юҡтың - хөрмәте юҡ
М.Ғафури. «Гөлдәр баҡсаһында» шиғырында эшсәнлек, дуҫлыҡ һәм дошманлыҡтың ҡапма-ҡаршы һүрәтләнеүе.
М.Ямалетдинов. «Ураҡ өҫтө» шиғырында ураҡ ваҡытында иген урыусы комбайнерҙың хеҙмәте. Уйылдан образы.
Ж.Кейекбаев. «Оморҙаҡ бабай». Хикәйәнең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү. Оморҙаҡ бабай образына хас сифаттар.
**Туған тел.**
Ҡылымдарҙың затһыҙ формалары: сифат ҡылым, хәл ҡылым, исем ҡылым, уртаҡ ҡылым. Уларҙың зат, һан менән үҙгәрмәүе.
Исем ҡылымда ҡылымлыҡ билдәләре: барлыҡ - юҡлыҡ, ҡылым күләмдәре һәм йүнәлештәре ялғауҙарын ҡабул итә алыуы.
Исемлек билдәләре: килеш, һан, эйәлек категориялары менән үҙгәреүе.
Исем ҡылымдарҙың исемгә күсеүе. Исем ҡылымдарҙы рус теленә тәржемә итеү.
Ж.Кейекбаев. «Туғандар һәм таныштар» романынан өҙөк. Өҙөктөң йөкмәткеһен үҙләштереү. Төп образдарға характеристика биреү.Һорауҙарға яуаптар биреү, план төҙөп, уның буйынса һөйләү. Башҡорт халҡының йылҡысылыҡ, солоҡсолоҡ һөнәрҙәре тураһында әңгәмә ойоштороу, яҙма эштәр башҡарыу.
Әҙәбиәт теорияһы: Герой тураһында төшөнсә.
Уртаҡ ҡылым, уның мәғәнәһе, яһалышы, барлыҡ-юҡлыҡ менән үҙгәреше. Рус телендәге уртаҡ ҡылымдың башҡорт теленә төрлө ҡылым формалары менән тәржемә ителеү мөмкинлектәрен миҫалдарҙа күҙәтеү. Киреһенсә, башҡорт телендәге уртаҡ ҡылым рус теленә төрлө ҡылымдар менән тәржемә ителә алыуын практик эштәр үтәлешендә асыҡлау.
Башҡорт телендә уртаҡ ҡылымдарҙың икенсе бер ҡылымдарҙы асыҡлап килеүе ихтимал: бирешмәҫкә тырыша, күрергә теләй һ.б.
Уртаҡ ҡылымдан һуң ярай, ярамай, тейеш, тейеш түгел, кәрәк, мөмкин модаль һүҙҙәре килеп, төрлө модаль мәғәнәләр белдерә алыуын практик күҙәтеү, уларҙы рус теленә тәржемә итеү.
Башҡортостан-ғәзиз ерем
Ә.Үтәбай. «Башҡортостан» шиғырында лирик геройҙың кисерештәрендә Башҡортостан, Тыуған ил образы. А.Игебаев. «Онотманым һине, ауылым» шиғырында хистәр байлығы, тыуған ерҙең күңелгә яҡын булыуын еткереү.
Сифат ҡылым, унда бер үк ваҡытта сифатлыҡ һәм ҡылымлыҡ мәғәнәһенең булыуы, йәғни предметтың, заттың билдәһен уның эше, хәрәкәте буйынса белдереүе. Сифат ҡылымдың заман менән үҙгәреүе. Хәҙерге заман сифат ҡылымдың ике төрө, ябай һәм ҡушма формалары, менән практик таныштырыу, уларҙың барлыҡта йәки юҡлыҡта тора алыуы.
Үткән заман сифат ҡылым, уның яһалышы, барлыҡта, юҡлыкта килә алыуы. Киләсәк заман сифат ҡылым, уның яһалышы, төрҙәре, мәғәнәләре. Сифат ҡылымдарҙың исемләшеүе, был осраҡта исемдәргә хас категориялар менән үҙгәреүе. Рус теленән

айырмалы рәүештә, башҡорт телендә исем алдында килеүсе сифат ҡылымдарҙың һан, эйәлек, килеш ялғауҙарнын ҡабул итмәүе.
Исем ҡылым, уның эш, хәл һәм хәрәкәттең исемен атауы, яһалышы.
М. Кәрим. «Ҡайын япрағы тураһында» Шиғырҙа ҡайын һәм япраҡ образы.
Башҡортостандың данлы тарихының сағылышы.
Ап-аҡ ҡарҙар яуа
К.Кинйәбулатова. «Һаумы, аҡ ҡыш!», Ш.Бикколов. «Урман», Ә.Әхмәт-Хужа. «Эй, Ҡыш бабай, Ҡыш бабай!», Г.Ғәлиева. «Ҡарһылыу». Шиғырҙарҙа ҡыш миҙгеленең, тәбиғәт күренештәренең һүрәтләнеше.
Хәл ҡылым, уларҙың яһалышы, мәғәнәләре, төрҙәре, үҙенсәлектәре. Хәл ҡылымдар процестың билдәһен белдереүҙәре менән рәүештәргә оҡшай, ә уларҙың барлыҡ-юҡлыҡ, күләм, йүнәлеш ялғауҙары ҡабул итеүе - ҡылымлыҡ билдәләре. Хәл ҡылымдарҙың ҡулланышы һәм дөрөҫ яҙылышы.
Ә.Әһлиуллин. «Биҙәкле сана». Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Боронғо сана яһау һөнәренең сағылышы. Имаметдин ҡарттың һөнәре, халыҡ араһындағы абруйы. Әҫәрҙә дуҫлыҡ, татыулык мотивы.
Ҡылым төркөмсәләренең рус теленә тәржемә ителеү үҙенсәлектәрен практик эштәр башҡарғанда күҙәтеү, уларҙы тәржемә итеү күнекмәләрен үҫтереү.
Ҡылымдарҙы дөйөмләштереп кабатлау.
Ил намыҫы - ир күңелендә
Р.Шәкүр. «Һаҡта тора илдең улдары» шиғырында Тыуған илде, тыныслыҡты һаҡлаусы ил улдары образдары.
Ф.Акбулатова. «Атай икмәге» хикәйәһе. Йөкмәткене үҙләштереү. Әҫәрҙә Бөйөк Ватан һуғышының һүрәтләнеше.
Рәүештәр. Уларҙың мәғәнәләре.
В.Исхаков. «Кеше күңеле - тәрән дарья». Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү. Исеменең мәғәнәһен асыҡлау. Һуғыш осоронда тылда халыҡтың тормошо һәм эшсәнлеге.
Рәүеш төркөмсәләре: төп рәүештәр, ваҡыт рәүештәре, урын рәүештәре, оҡшатыу-сағыштырыу рәүештәре, күләм-дәрәжә рәүештәре, сәбәп-максат рәүештәре тураһында төшөнсә.
А.Баһуманов. «Ҡайҙа һин генерал?». Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткәһен үҙләштереү. Проблемаларына, образдарына характеристика биреү. План төҙөп, план буйынса һөйләргә өйрәнеү.
Рәүештәрҙең яһалышы: тамыр, яһалма, ҡушма рәүештәр. Дәрәжәләре.
Рәүештәрҙеңтелмәрҙә ҡулланылышы.
Ғәзиздәрҙән-ғәзиз әсәләр
Г.Юнысова «Әсәйҙәр байрамы», «Йырлайым әсәйҙәр тураһында» (йыр).
Ф.Мөхәмәтдинов «Әсәйем ҡулы» шиғырҙарҙын һәм йырҙы тасуири уҡыу. Әсәйҙәр изгелегенең, бөйөклөгөнөң сағылышы.
Ф.Иҫәнолов. «Бер ҡаҙаҡ май». Әҫәрҙә әсә һәм бала араһындағы мөнәсәбәтте баһалау.
Ә.Бикчәнтәев. «Яраланған бүре күҙҙәре». Әҫәрҙә әсәнөң ҡыҙын үҙаллы тормошҡа әҙерләүе. Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһөн үҙләштереү. Һорауҙарға яуап биреү, план төҙөп һөйләргә өйрәнеү.
Г.Яҡупова. «Әсәйҙәр ниңә ҡартая?», «Мейес әбей».
Әсә менән бала, ейән менән өләсәй мөнәсәбәттәрө тураһында әңгәмә ойоштороу.
Теркәүестәр. Уларҙың һөйләм киҫәктәрен һәм ҡушма һөйләмдә ябай һөйләмдәрҙе бәйләп йөрөүе. Теркәүестәрҙең төркөмсәләре: теҙеү һәм эйәртеү теркәүестәре, уларҙың телмәрҙәгә ҡулланышын күҙәтеү.
Теркәүес һүҙҙәр: парлы һәм яңғыҙ теркәүес һүҙҙәр, уларҙың һөйләмдәрҙе һәм һөйләм киҫәктәрен бәйләүе күрһәтеү алмаштары менән белдерелә, яңғыҙ теркәүес һүҙҙәр: һорау һәм күрһәтеү алмаштары менән белдерелгән парлы теркәүес һүҙҙәр.

Теркәүестәрҙең дөрөҫ яҙылышы, уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу күнекмәләрен нығытыу.
Эх, күңелле яҙ килә!
Р.Ниғмәти. «Яҙ килде, яҙ!» шиғырында яҙ килеү менән тәбиғәттең уяныуының, яҙғы эштәр башланыуының һүрәтләнеше. Р.Ғариповтың «Һабантурғай» шиғырында яҙ килтереүсе һабантурғай образы. Шиғырҙарҙы тасуири уҡыу, төп идеяларын асыу.
Һ.Дәүләтшина. «Айбикә» повесы (өҙөк). Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Унда азатлыҡ өсөн көрәштең, ҡатын-ҡыҙҙың рухи үҫешенең һүрәтләнеше. Ауыл кешеһе йәшәйешенең сағылышы. Образдарға характеристика.
Бәйләүестәр. Уларҙың эйәреүсе киҫәк менән эйәртеүсе киҫәкте, эйәрсән һөйләм менән баш һөйләм араһындағы бәйләнеште барлыҡҡа килтереүе. Бәйләүестәрҙең төркөмсәләре, мәғәнәләре. Уларҙың телмәрҙәге әһәмиәте. Синоним бәйләүестәрҙе ҡулланыу күнекмәләрен нығытыу.
Бәйләүестәрҙең килештәргә мөнәсәбәте: 1) исемдәрҙең төп килештә, ә алмаштарҙың эйәлек килештә килеүен талап итеүсе бәйләүестәр; 2) исемдәрҙең төбәү килешен талап итеүсе бәйләүестәр; 3) исемдәрҙең сығанаҡ килештә тороуын талап итеүсе бәйләүестәр.
Тел - тере шишмә
Ҡ.Аралбай. «Башҡорт тел», Ғ. Байбурин. «Тыуған илемә» шиғырҙарында туған телгә, илгә, халыҡҡа ихтирам һәм дан йырланыуы.
М.Кәрим. «Оҙон-оҙак бала саҡ» повесы (өҙөк). Идея-тематик йөкмәкеһен үҙләштереү. Әҫәрҙә әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләре. Оло инәй, Кендек образдарына яҙма характеристика.
Киҫәксәләр. Уларҙың айырым һүҙгә йәки һөйләмгә ниндәй булһа ла мәғәнә төҫмөрләнеше биреүсе ярҙамсы һүҙ булыуы тураһында төшенсә. Киҫәксәләрҙең төркөмсәләре, уларҙың дөрөҫ яҙылышы, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу күнекмәләрен нығытыу.
Йәмле йәй
М.Ғафури. «Болон» шиғырында йәйге болон матурлығының тасуирланыуы.
Мөнәсәбәт һүҙҙәр. Уларҙың һөйләмдә хәбәр булып килеүе, шулай уҡ һөйләмгә төрлө модаллек мәғәнәләрен биреүгә лә хеҙмәт итеүе, дөрөҫ яҙылышы.
Х.Назар. «Йәйге йәшен». Әҫәрҙә йәйге тәбиғәт күренештәренең һүрәтләнеше.
Ымлыҡтар. Уларҙың кешеләрҙең хис-тойғоһон, теләк-ынтылыштарын белдереүе. Ымлыҡ төрҙәре, телмәрҙәге әһәмиәте, дөрөҫ яҙылышы. Ымлыҡтарҙың яңы һүҙҙәр яһауҙа нигеҙ булыуы.
С.Әлибай. «Ямғыр теләү» шиғырында ямғыр теләүҙең һүрәтләнеше.
Н.Игеҙйәнова. «Өйөрөлмәк» әҫәренең йөкмәткеһен үҙләштереү. Әҫәрҙә һүрәтләнгән хәл-ваҡиғаларҙы баһалау. Әҫәрҙең төп идеяһын һәм образдарын асыу.
Әҙәбиәттән бөтә үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Морфология буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлауға, бәйләнешле телмәр үҫтереү
Үҙаллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре араһындағы айырманы аңлата белеү. Һүҙҙәргә морфологик анализ күнекмәләрен үҫтереү өҫтөндә эш. Йыл буйына өйрәнелгән морфологик күренештәрҙе текстан таба һәм аңлата белеү.
Изложение, ирекле темаға инша яҙыу, хаталар өҫтөндә эшләү.
Ғариза тураһында төшөнсә, эш ҡағыҙҙарын яҙыу күнекмәләрен үҫтереү.

**8-се синыф**

Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе
Башҡортостан.
Тыуған илем-Башҡортостаным.
Ҡобайырҙар.
Ай Уралым, Уралым.Боронғоларҙан аманат.Салауат батыр. Бейек тауҙың үлгәне.Ил тигәндең кеме юҡ.Бер тигәс тә ни яман.
Әйтештәр.Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтешкәне.Һүҙбәйләнеш һәм һөйләм.

Диктант.Һүҙбәйләнештәрҙең яһалышы.Хаталар өҫтөндә эш.Эйәртеүле бәйләнештең төрҙәре
Ш.Әминев-Тамъяни.. Ш.Әминев-Тамъяни.Урал. Башҡорт бабаларының тарихы.Изложение.Һандуғас.Йәнәшлек. Һөйкәлеү
Мөхәммәт пәйғәмбәр.
Мөхәммәт пәйғәмбәр.Ҡөрьән китабы.Хәҙистәр.М.Ямалетдинов "Әл-фатиха сүрәһе"Һөйләмдең баш киҫәктәре.Эйә менән хәбәр. Араһында һыҙыҡ.
Ғәли Ибраһимов
"Кинйә"романыИнша. Романда Кинйә образы.Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре.Аныҡлаусы. Өҫтәлмәлек.
Баязит Бикбай. Баязит Бикбай. "Ер"поэмаһы.Ҡаһым түрә" драмаһы.
А.Мөбәрәков. А.Мөбәрәков.Атайым тураһында. Тултырыусы.
Ғ.Сәләм. "Шоңҡар" поэмаһы.
Диктант.Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре.Хәлдәр.Уларҙың төрҙәре.
З.Биишева.
Һөнәрсе менән өйрәнсек.Инша. Кеше үҙе үлһә лә, эше ҡала.
М.Кәрим.
"Үлмәҫбай" поэмаһы."Айһылыуҙың күҙ йәштәре", "Ҡоролтайға ҡотлау"
Диктант.
Н.Мусин
"Йыртҡыс тиреһе"Тиң киҫәкле һөйләмдәр. Тыныш билдәләре. Дөйөмләштереүсе һүҙҙәр.Изложение.Ике һәм бер составлы һөйләмдәр.Бер составлы һөйләмдәрҙең төрҙәре.Билдәле эйәле, билдәһеҙ эйәле һөйләмдәр.Эйәһеҙ һәм атама һөйләмдәр. Тулы һәм кәм һөйләмдәр.
Р.Ғарипов Урал йөрәге. Аманат. Уйҙарым.Инша.Әсәм теле миңә сәсән теле.Һөйләмдең айырымланған эйәрсән киҫәктәре.
Аныҡлаусыларҙың, хәл әйтемдәренең айырымланыуы.Диктант..
Ғ.Хөсәйенов. "Һуңғы тарпан"Айырымланған эйәрсән киҫәктәр.Өҫтәлмәлектәрҙең айырымланыуы.Ябай һөйләм синтаксисы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.Диктант
Р.Бикбаев "Башҡортостан бында башлана""Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта"Һөйләм киҫәктәре менән грамматик бәйләнеше булмаған һүҙҙәр.Өндәш һүҙҙәр..
Т.Ғиниәтуллин. Мәтрүшкә еҫе.Инша. Әсә күңеле балала.
Н.Нәжми. "Башҡортостан", "Аҡшишмә"
Инеш һүҙ һәм инеш һөйләмдәр.Изложение.
Ҡ. Аралбай.
"Беҙ-кеше"поэмаһынан өҙөкТура телмәрле һөйләмдәр.Тура һәм ситләтелгән телмәр.
Ф.Туғыҙбаева. Аҡмулла. "Ҡыңғырау"поэмаһы.Тура телмәрле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.
Ә.Әминев. Ҡытайгород.
Тура һәм ситләтелгән телмәр буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау Р.Камал. "Таня-Таңһылыу". Романдан өҙөк.
Х.Назар. Башҡортостан-минең баш йортом.Аҡҡа табыныу.

## 9-сы синыф

Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе
Башҡорт халыҡ эпосы йәки ҡобайырҙар –
Һүҙлек менән эш. Эпоста күтәрелгән философик, педагогик һәм әхлаҡ-этик проблемалар. Ҡушма һөйләм тураһында төшөнсә биреү, һөйләм төрҙәрен, тыныш билдәләрен үҙләштереү.
Сәсәндәр ижады
Сәсәндәр ижады тураһында белешмә. Әҫәрҙәрҙең төп идеяһы, образдар системаһы, сағыштырмаса характеристика. Әйтеш тураһында төшөнсә.
Шәжәрәләр

Шәжәрә тураһында төшөнсә. Шәжәрәләрҙең идея-тематик йөкмәткеһе. Баш һәм эйәрсән һөйләм.
Салауат Юлаев
Яугир-шағирҙың тормошо һәм яҙмышы. Салауат – яугир, шағир, сәсән. Шиғырҙарының тематикаһы һәм проблематикаһы. Тыуған ил, тәбиғәт, мөхәббәт, азатлыҡ һәм батырлыҡ тураһындағы шиғырҙары. Тарихи шәхес, әҙәби герой, тарихи ваҡиға һәм художестволы әҫәр тураһында төшөнсә. Картиналар буйынса эш. Эйәрсән һөйләм төрҙәре.
Аҡмулла
Биографик белешмә. Философик лирика. Тәбиғәт лирикаһы. Шиғыр-ҡобайырҙар. Эйәрсән һөйләм төрҙәре.
Өмөтбаев
М.Өмөтбаевтың ғилми-ағартыу, тарих, этнография, фольклор, тәржемә өлкәһендәге эшмәкәрлеге. Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр һәм уларҙа тыныш билдәләре.
Ризаитдин Фәхретдин
Р. Фәхретдиндең тормошо һәм ижады. Һөйләмдәр аҙағында тыныш билдәләре.
Сафуан Яҡшығолов
Яҙыусының тормош юлы һәм ижадына белешмә. Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр һәм уларҙа тыныш билдәләре.
Фәтхелҡадир Сөләймәнов
Ф. Сөләймәнов «Тимербай – ҡурайсы”. Һыҙыҡтың ҡуйылыу осраҡтары.
Мәжит Ғафури
Яҙыусының тормош юлы һәм ижадына белешмә. Әҫәрҙәрендә социаль тигеҙһеҙлекте, ғәҙелһеҙлекте фашлау. Художество методы, художество образ тураһында төшөнсә. Рәшит Нурмөхәммәтовтың картинаһы буйынса эш. Һыҙыҡ, нөктәле өтөр, ике нөктәнең ҡуйылыу осраҡтары.
Ш.Бабич
Шағирҙың тормош һәм ижад юлы тураһында белешмә. Башҡортостан, азатлыҡ өсөн көрәш, тәбиғәт, мөхәббәт темаһы. Йәйәләр һәм тырнаҡтар ҡуйылыу осраҡтары. Синтаксис һәм пунктуация буйынса үтелгәндәрҙе дөйөмләштереү һәм системаға һалыу.

## 10-сы синыф

Башҡорт һүҙ сәнғәте.Башҡорт халыҡ ижады.Урал батыр.Башҡорт ауыҙ-тел әҙәбиәте. Йыраужар. Һабрау.Ҡарас сәсән. Ҡарас менән Аҡша.Буранбай-йәркәй сәсән.Буранбай.Байыҡ сәсән.Мөхәммәтша Буранғолов. Ватан һуғышы.Башҡорт әҙәбиәте тарихының осорҙарға бүленеше. Боронғо дөйөм төрки әҙәбиәте.Болғар осоро әҙәбиәте. Йософ Ҡиссаһы.Ҡыпсаҡ осоро әҙәбиәте. Һуңғы һартай.
Рәсәй осоро әҙәбиәте. Ҡара табын ырыуы шәжәрәһе.Батыршаның императрицаЕлизавета Петровнаға яҙған хаты.Салауат Юлаев. Тыуған илем.XIX быуатта әҙәби процесс. Һибәтулла Салихов.Ғәли Соҡорой.Ҡуҙыйкүрпәс.Мәғрифәтселек әҙәбиәте. Мифтахетдин Аҡмулла.Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!Риза фәхретдинов. Сәлимә.
XX быуат башы әҙәбиәте. Ярлылар, йәки өйҙәш ҡатын. Мәжит Ғафури.Бәхтиәр Бәхтигәрәй улы. Ер һатыу.Сафуан Яҡшығолов.Фазыл Туйкин. Ватан Ҡаһармандары.Совет осоронда әҙәби процесс.Тарихи-революцион темаға арналған әҫәрҙәр. Ҡан. Д. Юлтый.Һ.Дәүләтшина. Партизандар.З.Биишева. Закир.
Ҡатын-ҡыҙ яҙмышы проблемаһына арналған әҫәрҙәр. Шәриғәт ҡорбандары М. Ғафури.Айбикә. Һ. Дәүләтшина.Колхоз төҙөлөшөнә арналған әҫәрҙәр. Имай Насыри. Шәрәфи ағай. С.Агиш. НигеҙТарихи темаға арналған әҫәрҙәр. Д. Юлтый. Ҡарағол. Кирәй Мәргән. Бөркөт ҡанаты.Ғәли Ибраһимов. Кинйә. Думбыра сыңы. Әхиәр Хәкимов.Һуғыш темаһына арналған әҫәрҙәр. Рәшит Ниғмәти. Үлтер, улым, фашисты!

Ҡара һыуҙар. М.Кәрим.Күпер. Ә. Хәкимов.«Үлһәм,Матросов тип эҙләрһең» Рәүеф Насиров. Әнғәм Атнабаев Әсә хөкөмө.Марат Кәримов. Образ тураһында төшөнсә. Тыныс хеҙмәт темаһына арналған әҫәрҙәр. Ғәлимов Сәләм. Республика иртәһе. Фәлсәфәүи йөкмәткеле әҫәрҙәр. Ғайса Хөсәйенов. Донъя. Б. Бикбай. Р. Ғарипов.Табыныу,Оҙон-оҙаҡ бала саҡ. М.Кәрим.

## 11-се синыф

Тел һәм телмәр.Рус теленән тәржемә яһау.Күнегеүҙәр эшләү. Морфология буйынса һорауҙар.Исем.Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүе.Ҡушма һүҙҙәр.Ҡылым.Сифат.Рәүеш.Алмаш.һан.Синтаксис.Һөйләм.Һөйләмдә һүҙҙәрҙең бәләнеү юлдары.Диктант.Бәхетле ҡартлыҡ.Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе.Һөйләм киҫәктәрен билдәләү алымы.Һөйләм киҫәктәренең һорауҙары.Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә менән хәберҙең ярашыуыҺөйләмдең эйәрсән киҫәктәре.Ике составлы һәм бер составлы һөйләмдәр.Теҙмә ҡушма һөйләмдәр.Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр.Теркәүесле һәм теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр.Ябай һөйләм төрҙәре.Диктант.Үтелгән темалар буйынса күнегеүҙәр эшләү.Башҡорт телендә юҡлыҡты белдереү.Башҡорт телендә юҡлыҡты белдереү.«Синтаксис» темаһы буйынса һорауҙар.Диктант. Бәхетле ер.Үтелгән темалар буйынса күнегеүҙәр эшләү.Инша.Үтелгән темалар буйынса күнегеүҙәр эшләү.

Ҡушымта 1

Диктант текстары

5-се синыф

1

Икмәк тураһында уйҙар.

Беҙҙең илебеҙ икмәккә бай. Магазиндарҙа төрлө печеньелар, булка, бойҙай һәм арыш икмәктәре тулып ята. Икмәк – ул йәшәү көсө, бөйөк бәхет! Ләкин игенде үҙе үҫтермәгән, аслыҡты Бер ҙә күрмәгән ҡайһы берәүҙәр икмәктең ҡәҙерен белмәй. Урамдарҙа икмәк һыныҡтарын типкелегәнде күрергә мөмкин. Шуға беҙҙең, оло быуын кешеләренең, эссе боша, күңеле әрней. Икмәк - бөтә халыҡ байлығы. Уны ҡәҙерләргә, хөрмәтләргә, һаҡларға кәрәк!
(А. Гиталовтан.)

2

Йыл миҙгелдәре.

Көҙ, ҡыш, яҙ, йәймиҙгелдәренең иң яҡшыһын һайларға ҡушһалар, быны эшләүе ауыр булыр ине. Сөнкиһәр йыл миҙгеленең үҙенсә матурлығы, яҡшылығы бар.

Ҡыш сана, конькишыуаһың, рәхәтләнеп саңғыла йөрөйһөң. Көҙ айҙары мул уңыш, ҙур байлыҡ килтерә.Яҙ айҙары ҡар иреүе, боҙ китеүе, бөтә тәбиғәттең уяныуы менән күңелле. Йәйкөндәре йылы, матур була. Йәй кешеләргә нығыраҡ оҡшай. Сөнки йәй ял итәһең, һыуинәһең, балыҡ тотаһың.

3

Контроль диктант

Ғинуар.

Ғинуарҙа яңы йыл башлана. Ғинуар – беҙҙең Башҡортостанда иң һыуыҡ ай. Ыжғыр буранлы көндәр күп була. Әсе ел һыҙғыра, төндәрен ул олой, ҡоторона.

Селдәр, ҡорҙар, һуйырҙар ҡалын ҡар аҫтына күмелгәндәр. Улар сатлама һыуыҡтарҙың уҙғанын көтәләр. Тик һайыҫҡандар, турғайҙар ғына көслө һыуыҡтарҙа ла соҡсоналар. Улар кеше йәшәгән урындарҙан аҙыҡ эҙләйҙәр. Ябалаҡ үткер күҙҙәре менән ҡар өҫтөн күҙәтә. Ҡар аҫтындағы өңөнән сыҡҡан сысҡанды һағалай.

4

Диктант. Әсә шатлығы.

Мин ун бер йәштәрҙә булғанмындыр, яңы ғына уҡыуҙан ҡайтҡайным.

- Балам, бар, килтер әле таныҡлығыңды!- тине әсәй.

Мин быны сабырһыҙлыҡ менән көтә инем. Урыныбыҙҙан нисек һикереп торғанымды белмәйем.

Алтын хәрефтәр менән яҙылған ҡиммәтле ҡағыҙҙы әсәйемә килтереп бирҙем. Был – мәктәпте тамамлауым тураһында таныҡлыҡ ине.

Билдәләр оялтырлыҡ түгел, бөтәһе лә "бишле". Был – минең өсөн әйтеп бөтөргөһөҙ ҙур бәхет ине. Таныҡлығымды мең тапҡыр уҡығанмын, унда ни барын яттан беләм. Шулай ҙа уны әсәйем ауыҙынан ишетке килә." Ни тиһең, әсәй, яраймы?"тигән ҡараш менән күҙҙәренә текәлдем. Яуап көтәм. Ул һалмаҡ ҡына күҙ йөрөтөп сыҡты ла:

-Рәхмәт, балам, рәхмәт, күҙ нурым, тырышҡанһың,- тине.

5

Контроль диктант. Дуҫтар.

Борис менән Камал утрауҙа үҙҙәре генә ҡалған. Улар нимә тураһындалыр шым ғына һөйләшә.

Был утрау бер юғала, бер һыу аҫтынан ҡалҡып сыға. Уға ситке урам малайҙары хужа. Бында улар ниндәй генә серҙәр серләшмәй, ниндәй негә уйындар уйнамай! Йә бәһлеүән, йә партизандар командиры, һис юғында шәфҡәтле атаман булалар. Ошонда ғына Азаматтың өс тапҡыр Чапай, бер тапҡыр Пугач булғаны бар. Ә Салауат булған маҡтың инде иҫәбе лә, һаны ла юҡ.

Малайҙар һөйләшеп туйҙылар ҙа һыу инергә тотондолар. Шунда улар төҫө ҡасҡан Азаматты күрҙеләр. Уға ни булған?

6

Контроль диктант. Тәбиғәтте һаҡлайыҡ!

Тыуған яҡтарыма ҡайтып барам. Эйе, Башҡортостан бик матур. Ләкин, бара торғас, тирә-йүн үҙгәреп китте. Ҡоштар ҙа һирәк күренгәндәй, үләндәр ҡыҫҡа, һарғайып бөткән. Үкенескә ҡаршы, был ерҙәр шундай. Стәрлетамаҡ, Салауат, Ишембай, Мәләүез ҡалаларындағы заводтарҙан сыҡҡан төтөн, бысраҡ һыуҙар тирә-яҡты зарарлай. Беҙгә тыуған тәбиғәтебеҙҙең матурлығын һаҡлау сараһын күрергә кәрәк. (48 һүҙ.) («Йәншишмә» гәзитенән.)

1

Контроль күсереп яҙыу

Ҡурай моңо.

Ҡайҙандыр ҡурай моңо ишетелә. Моң йөрәктәргә үтеп инә. Ҡоштар ҙа, йәнлектәр ҙә, йылғалар ҙа тынған. Ағастар әкрен генә тирбәлеп ойоп ултыра. Урман сәскәләре лә ошо тәьҫиргә бирелгән. Улар хатта тын алыуҙан да туҡтаған кеүек.

Ә һеҙ, балалар, ҡурай моңон тыңлағанығыҙ бармы?

2

Контроль күсереп яҙыу

Кемдәр шатлана?

Бер ваҡыт Йәмлиха яман сыйылдашып осҡан ҡарлуғастарға иғтибар итә ҡалды. Ҡыйыҡҡа күҙе төштө. Унда күршеләренең оло бесәйе! Йәмлихә йүгереп килде, һөйәп ҡуйылған ҡолғаны эләктерҙе лә ҡараҡ бесәйгә ташланды.Бик ҡаты һелтәнеп йүгерҙе, ләкин бесәй етеҙерәк булып сыҡты. Әммә уның шул һелтәүеәллә күпме ҡыуаныс тыуҙырҙы, сөнки күктәә – ҡарлуғастар, ерҙә әсәһенең итәгенә тағылып йөрөгән малай шатланды.

Бына ул көйәнтә- биҙрәләрен алды ла һыуға китте.Йәмлихаатлай, уның алдында ғына ҡарлуғастар осоп бара. Улар уны ҡоҙоҡҡа тиклем оҙата барҙылар. Бына Йәмлиха һыу алды, ә ҡарлуғастар уның баш осонда әйләнеп торҙолар, бөтмәҫ- төкәнмәҫ шатлыҡтарын һөйләй – һөйләй, серләшеп бергә ҡайттылар.

6- сы синыф

Диктант 1

Ҡарабаш турғай.

Бөтә турғайҙар араһында иң сос, иң етеҙ ҡош булып ҡарабаш турғай һанала Уның бер ваҡытта ла тик ултырғанын күрмәҫһең.

Ҡарабаш турғайҙың ояһы ағас башында була. Ул баҡсаларҙы,урмандарҙы ҡоротҡостарҙан таҙарта: балаларын тик бөжәктәр менән генә туҡландыра. Шуға күрә ҡарабаш турғай – ифрат файҙалы ҡош.Тик һалҡын ҡыш көндәрендә ҡарабаш турғайҙар аҙыҡ етешмәүҙән ныҡ яфалана. Шуға күрә уларға ҡыш көндәре ем бирергә кәрәк. (63 һүҙ.)(Э. Ишбирҙиндән.)

Контроль диктант.2

Башҡортостан.

Башҡортостанды "Икенсе Швейцария" тип әйтәләр. Был юҡҡа түгелдер. Башҡортостандың тбиғәте иҫ киткес матур. Уда бейек-бейек тауҙар ҙа, иркен яландар ҙа, ҡуйы урмандар ҙа бар. Башҡортостандың физик каратһына ҡарағыҙ әле. Картала уның тәбиғәте бик асыҡ сағылған.

Ләкин матурлыҡты һаҡлай белергә кәрәк. Тәбиғәткә зыян килтереүселәр бик күп. Урмандарҙа сүп-сар ҡалдыралар, янғын сығаралар.

Ер өҫтөндә ҡалған ҡағыҙ ике йылдан һуң сереһә, быяла утыҙ йыл буйына сыҙай. Политилен бөтөнләй серемәй, уның аҫтында ҡалған тереклек һәләк була.

Дарыу үләндәрен, сәскәләрҙе һаҡлағыҙ. Улар йылдан-йыл кәмей бара.

Диктант3. Башҡортостан йырҙар иле.

Башҡортостан- йырҙар иле. Уға бары шундай ғына исем бирергә мөмкин. Башҡорт ерҙәренең шиғри исемдәре ниндәй генә йырға кермәгән дә, ҡайһы ғына яҡҡа барып етмәгән! Күкһелләнеп ятҡан Урал тауҙары, Ағиҙел, Ашҡаҙар, им, Һаҡмар, Таньп, Ыҡ йылғалары йөҙҙәрсә башҡорт, татар йырҙарында йырланалар. Хатта ғүмерендә Өфөнө, Ағиҙелде, Димде, Һаҡмарҙы, Уралды күрмәгән татар кешеһе лә шул исемдәр менән йырҙар ижад итә. Татарҙар башлыса Кама, Вятка, Ыҡ, Сәрмәсән буйҙарында йәшәгәндәр.Әммә был йылғаларҙың исеменә арналған йырҙар беҙҙә бик һирәк.

Башҡортостан- ул ысын мәғәнәһендә йырҙар бишеге, көйҙәр ватаны, музыка шишмәһе, шиғыр баҡсаһы.

## Диктант 4 Инең яратҡан һөнәрем.

Бишенсе синыфта уҡытыусы беҙгә ошо темағаинша яҙырға ҡушҡайны. Мин оҙаҡ уйлап тормаҫтан:" Әллә нисәмә атты алмаштырырлыҡ тракторҙы һыңар ҡулым менән генә йөрөткөм килә"- тип башлап киткәйнем.

Бына хәҙер механизаторҙар курсында уҡып сыҡтым. Икенсе йыл инде күрше колхозда трактор йөрөтәм. Теге йәки был рычагты һыңар ҡулым менән генә тарттыммы, тимер әзмәүер мин теләгән эште башҡара. Ә уның бер көйгә генә гөрөлдәүе нисек! Трактор тауышын ниндәйҙер дәртле бер көйгә оҡшатам мин.

Ауылыма үткән ҡыш ҡына ҡайтып әйләнгәйнем. Шунан аҙаҡ ҡайтырға форсат булманы. Шуға ла көҙгө баҫыу эштәренән һуң әсәйем янына ҡайтып килмәксе булдым. Райондағы магазиндан әсәйемә сағыу биҙәкле күлдәкле тауар,шәльяулыҡ, ҡуңыслы калуш алдым. (Н. Мусин.)105 бит.

## 7-се синыф

### Диктант 1. Йәйге иртә.

Һоҡланғыс йәйге иртә.Ҡыҙарып сыҡҡан ҡояш нурҙарында,һарғылт йәшел төҫкә инеп,әкрен генә томан күтәрелде.Күҙ яуын алып, үлән баштарында ысыҡ емелдәй, әйтерһең дә, аяҡ аҫтына һанһыҙ ынйы бөртөктәре һипкәндәр.Тәбиғәт әкренләп йоҡонан уяна. Ҡайҙалыр алыҫта һайыҫҡан шыҡырлағаны ишетелде. Уға яуап ҡайтарғандай, ике тапҡыр кәкүк тә саҡырып ҡуйҙы.

Туғайҙан һандуғас йыры ишетелде.Шуны ғына көткәндәй, таллыҡта турғайҙар сутырлаша башланы. Бар тереклеккә ҡыуаныс һәм өмөт биреп, яңы яҡты көн тыуҙы. (70 һүҙ.) (Б.Байым)

### Контроль диктант.2 Арҡайым.

Яңыраҡ Сибайҙан йыраҡ түгел бөтә донъяға билдәле булған Арҡайым тигән ҡаласыҡ табылды. Ул беҙҙең эраға тиклемге 17-16-сы быуаттарға ҡарай, был осорҙо бронза быуаты тип йөрөтәләр.

Арҡайым ағас менән балсыҡтан һалынған булған. Бик күп ваҡыт үтһә лә, уның эҙҙәре асыҡ һаҡланып ҡалған. Боронғо төҙөүселәр алдан уйлап, план ҡороп эшләгән. Йорттар үҙәктәге төп майҙан тирәләй урынлашҡан. Икенсе түңәрәктә дошмандан һаҡланыр өсөн нығытмалар ҡоролған.

Боронғо төҙөүселәр металл ҡойор өсөн мейестәр ҙә һалған. Улар өсөнсө түңәрәктең эске яғында.

### Контроль диктант.3. Тәрбиәле бала.

Тәртипле баланың ҡульяулығы, тарағы булыр. Үҙ ҡульяулығына битен,ҡулын һөртөр, үҙ тарағы менән сәсен тарар.Тәрбиәле бала һис ваҡытта ла аяҡ өҫтө ашап йөрөмәҫ. Тәртипле бала үҙ эшен үҙе эшләр. Кейемдәрен бысратһа, үҙе таҙартыр, әгәр үҙенең көсө етмәҫлек эштәр булһа, ул өлкәндәрҙән ярҙам һорар. (44 һүҙ) ( Р.Фәхретдин)

Контроль диктант.4 Рәүеш.

Күп,алпан- толпан, бишләтә, боландай, хәҙер, бөтөнләй, йыш-йыш, бөгөн, үҙ-ара, һыбай, айыуҙай, минеңсә, берәм-һәрәм, бушҡа, башҡортса, юрамал, тиҙерәк, тулыр- тулмаҫ, көҙөн, ялан өҫ, асыҡтан- асыҡ, иртәнән һуң, ҡул алмаш, йөҙ түбән, арлы- бирле, элек- электән, аяҡ өҫтө, көскә- көскә, һуңыраҡ.

8- се синыф

Диктан 1Көҙгө йәйғор.

Мин көҙгө урманда йөрөргә яратам.Уның иң гүзәл сағы сентябрь бөткәндә,октябрь баштарында булалыр.Үрмәксе ауҙары иренеп кенә йөҙгән зәңгәр күккә,йылы аяҙ көнгә,урмандың төрлө биҙәк хазинаһына һоҡланып туя алмайһың.Тәрән тынлыҡ.Аяҡтарыңды ергә түшәлгән алтын япраҡтар иркәләй.Ә ағастар?Ниндәйҙер оло ҡарағай йәки имән ышығында үҙенең ҡыҙыллы-һарылы сыбар кейемендә йәш саған ҡупшыланып ултыра.Тағы сыбар биҙәкле япраҡтарға һарыҡҡан асыҡ ҡыҙыл емештәре менән ҡыштырлап миләш тора.Уҫаҡтың уҫағына тиклем:"Ҡарағыҙ,мин бына ниндәй!"-тигән һымаҡ,йәйғор буяуҙары менән күҙҙәрҙе ҡамаштыра.

Көҙгө урмандың гүзәллегенә күңелеңде рәхәтләндереп йөрөй бирәһең дә кескәй аҡланға килеп сығаһың,уның тәрән тынлығын тыңларға ултыраһың.Шунда татлы хыялдарға күмелеп киткәнеңде үҙең дә һиҙмәй ҡалаһың.(Д.Исламов.)

Диктан 2 Кем хаҡлы?

Ырҙында эш яйланды.Бойҙай көшөлө ике көндә таҙартылып бөттө.Тик комбайндан иген аҡрын килә,хәйер,улар күберәк яҫмаға һалғанды көтөп ултыра.Өлгөрөп еткән бойҙай лафет менән яҫмаға һалына,ә көндәр,үкенескә ҡаршы,йонсоуға тартып тора.

Кәбир комбайн менән туранан-тура урырға тәҡдим итте,ә рәйес:

-Ярамай,агроном,ярамай,-тип ҡырт киҫте.

Әммә Кәбир үҙенекен иҫбатларға тырышты:

-Беренсенән,ваҡытты отабыҙ;икенсенән,күпме иген юғалтыуҙан һаҡлап ҡалына;өсөнсөнән,лафеттан бушаған тракторҙарҙы туңға һөрөргә төшөрөр инек...

-Дүртенсенән,-тип һанап китте рәйес Ғәбделхәкимов,-прогрессив ысулды һанға һуҡмаған өсөн,рәйескә шелтә бирәсәктәр.( һүҙ)(Яр.Вәлиев)

Өҫтәлмә эш.

Инеш һәм өндәш һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙығыҙ.

9-сы синыф

Диктан 1.Көн исемдәре.

Билдәле булыуынса, көн исемдәрен башҡортса дүшәмбе, шишәмбе, шаршамбы, кесаҙна, йома, шәмбе, йәкшәмбе тип атайҙар. Был һүҙҙәр нимә аңлата һуң? Бына уларҙың мәғәнәләре: йәк, дү, ши, шар ҡушымталары – бер, ике, өс, дүрт һандарының исемдәре. Ә шәмбе – “көн” тигәнде аңлата икән. Фарсылар шул һандарға шәмбе һүҙен ҡушып, аҙна көнө исемдәрен яһаған. Шулай итеп, йәкшәмбе – беренсе көн, дүшәмбе – икенсе көн, шишәмбе – өсөнсө көн, шаршамбы – дүртенсе көн. Кесаҙна һүҙенә фарсылар дини мәғәнә һалған. Уны кесе йома тип тә әйтәләр. Ул намаҙға йыйылыу көнө тигәнде аңлата. Йома һүҙе аҙна мәғәнәһен бирә. Аҙна һүҙе фарсы телендә етене белдерә.

Контроль диктант 2. Октябрь.

Октябрь – көҙҙөң беренсе һыуыҡ айы. Әсе елдәр иҫә. Иртәнге  һыуыҡтар көсәйә төшә. Күләүектәр таңғаса боҙ менән ҡапланған була. Йыш яуған һалҡынса ямғырҙар арҡаһында октябрҙе халыҡта “батҡаҡ айы” тип тә атайҙар. Тәүге ҡар яуа, ләкин ул шунда уҡ ирей. Ҡайһы бер йылдарҙа ҡар ятып та ҡуя.

Күлдәр, быуалар туңа башлай. Иң аҙаҡҡы күсмә ҡоштар китеп бөтә. Иң һуңғы булып сәүкәләр, өйрәктәр китә. Уларға алмашҡа ҡыҙылтүштәр, беҙҙең яҡтарҙа ҡышлаусы бүтән ҡоштар килә. Ныҡлап һыуыҡ төшөү менән, айыу, бурһыҡ, алйырҙан йоҡоға тала. Телмәрйендәр ҙә йоҡоға китә.

Баҡсаларҙа ағас ултыртыу дауам итә. Япраҡтар тулыһынса ҡойолоп бөтә.

Диктант 3. Яугир менән ат.

Һуғышта ҡатнашҡан һыбайлы һәм яугир яҡшы белә: атының ҡаты яраланып, ҡан һауған эсен тырҡылдатып, йән бирә алмай ятыуын күреүҙән дә ауыр йөрәк ғазабы юҡтыр.Тик хәҙерге киноларҙа ғына кавалерист, әгәр ҡаты яраланып ауһа, һә тигәнсе пистолетын сығара ла уға мөлдөрәп текләгән, күҙҙәренән соборлатып йәш ағыҙып ятҡан атының маңлайына терәп ата ла китә. Дөрөҫ түгел был, дөрөҫ түгел! Быға ышанмағыҙ! Һуғышҡа үҙең менән тире һеңешкән башын һәр саҡ яурыныңа һалып, бер ҡарағанда йәшкелт, ә икенсе ҡарағанда муйыл кеүек сөм-ҡара күҙҙәре менән һиңә йәнтәслим бирелгәнлеген тик әйтә генә алмай текләп торған. Мең ғаләм араһында һине бер кем менән дә бутамай, үҙеге өҙөлөп көткән атыңды үҙ ҡулың менән атып китеү- үҙеңдең йән дусыңды атып үлтереү менән бер ул. (Р.Өмөтбаев.)

11 синыф

## Диктант 1. Бәхетле картлык.

Ҡунаҡтар оҙаҡ көттөрмәнеләр, иң элек ҡарсығы менән Ғариф ағай килде. Бригадир ҡунаҡҡа барғанда ғына һандыҡтан сығара торған төлкө туныһ, ҡама бүркен, аяғына яңы быймаһын кейеп, билен яҫы билбау менән ҡымтып быуған. Ҡунаҡҡа барған саҡта ҡупшы кейенеү- уның яратҡан ғәҙәте.Берҙән, ул быға кеше алдында үҙенде һынатмау, икенсенән, үҙҙәрен саҡырыусы хужаларҙы хөрмәтләү тип ҡарай. Шулай уҡ, уныңса, ҡунаҡҡа күстәнәсһеҙ барыу ҙа ҙур мөрәүәтһеҙлек һанала; уның был ҡылығын ҡарсығы Мәғфиә лә күптән үҙ итеп бөткән инде, ул да биш билле әҙрәс бишмәттән, эре суҡлы ҡалын шәлдән ине.

Улар иҫәнлек- һаулыҡ һораштылар. Шул арала уҡ Ҡадир, уларҙы ололап, сисендерә башланы. Ғариф ағай:

-Иртә килгән урын өсөн, һуңға ҡалған тамаҡ өсөн,-тип һөйләнә-һөйләнә, түр башына менеп тә ултырҙы.

- Бер ҙә ҡартая белмәйһең, ғариф ағай,- тине Ҡадир, уның етеҙ хәрәкәтенә һоҡланып.

-Ваҡыт юҡ, ҡустым, ваҡыт юҡ. Күкрәк киреп йәшәр саҡ етте,үлемдән отсрочка һорап торорға тура килер, навернай. (Б.Бикбай)

## Диктант 2. Бәхетле ер.

Беҙҙең яҡта кешенең кешелеген уның ҡатын- ҡыҙҙарға булған мөнәсәбәтенә ҡарап билдәләйҙәр. Мин дә шуға ҡушылам:" Илдең бөйөклөгөн, ундағы прогресты ҡатын-ҡыҙҙың хәленә ҡарап билдәләргә кәрәк. Ҡатын-ҡыҙ күҙ йәше аҡҡан ерҙә тормош шәп түгел, ә ҡатын-ҡыҙ йырлаған ер иһә- бәхетле ер"- тип әйтер инем.

Әсә йыры- доньяла иң бөйөк йыр.Ҡалған бөтә йырҙар ҙа шунан башлана. Әгәр ҙә сәңгелдәк йыры булмаһа, һис шикһеҙ, бүтән йырҙар ҙа тыумаҫ ине. Ул ваҡыт, күрәһең, доньяла бәхет тә, шатлыҡ та әлегенән байтаҡҡа ҡайтышыраҡ булыр ине. Беҙ әсә йырын тыңләрсә йылдар үткәс тә, тормошобоҙҙоң иң ауыр һәм иң бәхетле сәғәттәрендә иҫкә төшөрәбеҙ.

Тау халҡы йүнһеҙ кеше тураһында: "Сәңгелдәктә ятҡанда, әсәһе, моғайын, уға йыр йырламағандыр",- ти.

Валентина Терешкова, ҡатын- ҡыҙҙарҙан беренсе космонавт, йыһандан әйләнеп ҡайтҡас, сит ил хәбәрселәре һорайҙар:"Яратҡан кешеңдең исеме кем?" "Әсәй", - тип яуап биргән Валя. (Р. Ғамзатовтан.)188 бит.

**Ҡушымта2**

## Уҡыу-методик һәм мәғлүмәт-ресурс менән тәьмин итеү

### Уҡыу-методик әҙәбиәттә

1. Хажин В. И., Вильданов А. Х., Аккужина Ф. А., Карабаев М. И., Аминева З. Р. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте. 5-се синыф өсөн дәреслек. – Уфа: Китап, 2020 – 296 с.

2. Хажин В. И., Вильданов А. Х., Аккужина Ф. А., Карабаев М. И., Аминева З. Р. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте. 6-сы синыф өсөн дәреслек. – Уфа: Китап, 2020. – 340 с.

3. Хажин В. И., Вильданов А. Х., Аккужина Ф. А., Карабаев М. И., Аминева З. Р. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте. 7-се синыф өсөн дәреслек – Уфа:Китап, 2017. – 296 с.

4. Хажин В. И., Вильданов А. Х., Аккужина Ф. А., Карабаев М. И., Аминева З. Р. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте. 8-се синыф өсөн дәреслек. – Уфа: Китап, 2017. – 280 с.

5. Хажин В. И., Вильданов А. Х., Аккужина Ф. А., Карабаев М. И., Аминева З. Р. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте. 9-сы синыф өсөн дәреслек – Уфа: Китап, 2017. – 268 с.

6. Хажин В. И., Вильданов А. Х., Аккужина Ф. А., Карабаев М. И., Аминева З. Р. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте. 10-11-се синыфтар өсөн дәреслек – Уфа: Китап, 2018. – 268 с.

### Уҡыу әсбаптары

7. Ильмухаметов А. Г. Хәҙерге заманда дәресте проектлау. – Уфа: ИРО РБ, 2015. – 54 с.

8. Сафина Л. Х., Латыпова Р. М., Санъяров Ф. Башҡорт теле яңы ҡараш. – Уфа: Мир печати, 2021. – 94 с.

### Һүҙлек

1. Азнагулов Р. Г. Башҡорт-рус, рус-башҡортса мәктәп һүҙлеге. – Уфа: Китап, 2018. – 608 с.

2. Саяхова Л. Г. Русса-башҡортса тематик һүҙлек иллюстрированный. – Уфа: Китап, 1998. – 303 с.

3. Саяхова Л. Г., Ураксин З. Г., Асадуллина Ф. Ф., Сахипова З. Г. Урыҫса-башҡортса уҡыу-уҡытыу һүҙлектәре. – Уфа: Китап, 2011. – 452 с.

4. Саяхова Л. Г., Усманова М. Г. Урыҫ-башҡорт, башҡорт-урыҫ уҡыу-уҡытыу һүҙлектәре. – Уфа:«Эдвис». – 2011. – 265 с.

#### Методические пособия

5. Габитова З. М. Формирование универсальной учебной деятельности на уроках башкирского языка. – Уфа: ИРО РБ, 2013. – 36 с.

6. Габитова З. М. и др. Методические рекомендации по составлению рабочей программы. – Уфа: ИРО РБ, 2015. – 52 с.

**Информационные ресурсы**

7. Башҡорт энциклопедияһы // URL: http:www.bashenc.ru (дата обращения: 08.07.2022).
8. Башҡорт халыҡ әкиәте // URL: http://skazkoved.ru/index.php?fid=1&sid=49 (дата обращения: 08.07.2022).
9. Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «китап» нәшриәте // URL: http:www.kitap-ufa. ru (дата обращения: 08.07.2022).
10. Башҡорт бейеү көйҙәре, йырҙары (Башкирские мелодии и песни) // URL: http:allmuz.org/melody (дата обращения: 08.07.2022).
11. Веб-ресурс «Онлайн Башҡорт теле » // URL:https://region.bspu/ (дата обращения: 08.07.2022).
12. Веб-ресурс для самостоятельного изучения башкирского языка «Интерактив башҡорт теле» // URL: https://bashlang.ru (дата обращения: 08.07.2022).